Ор 85.1
К 17

КАРУАНҺАРАЙ

КАРАВАН-САРАЙ

КАРУАНҺАРАЙ

КАРАВАН-САРАЙ

УФА
«КИТАП»
1996

Оренбург...
библиотека им. Н. К. Крупской

КАРУАНҺАРАЙҒА— 150 йыл

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРЫ
(БАШКИРСКАЯ НАРОДНАЯ ПЕСНЯ)

КАРУАНҺАРАЙ

1

Айҡай ҙа ғына сайҡай, ҡолас киреп,
Һай кем, ҡолас киреп,
Таштар ҙа ғына вата, ай, һарайға,
Һай кем, ай, тауҙарҙа.
Майор ҙа ғына беҙгә торлаҡ тине,
Һай кем, торлаҡ тине,
Батыр ҙа ғына булғас һуғышҡанда шул,
Һай кем, ай, яуҙарҙа.

Айҡай ҙа ғына сайҡай, таштар вата,
Һай кем, таштар вата,
Каруан да ғына һарай, ай, һалырға,
Һай кем, ай, далала.
Торлаҡ ҡына булыр, яуҙан ҡайтһа,
Һай кем, яуҙан ҡайтһа,
Атлы ла ғына яуға, ай, ятырға,
Һай кем, ай, ҡалала.

Каруан да ғына һарай, ай, асылғас,
Һай кем, яуҙан ҡайтҡас,
Кантондарға булды, ай, фарман шул,
Һай кем, өс йыл тулғас.
Кантондар ҙа барыһы фарман алғас,
Һай кем, фарман алғас,
Штатский булып, ай, ҡалдылар,
Һай кем, ҡылыс һалғас.

Каруан да һарай, башы ҡалай,
Һай кем, башы ҡалай.
Һалған да ғына уны, ай, атайҙар,
Һай кем, яу бөткәндә.
Майор ҙа ғына илгә фарман бирҙе,
Һай кем, фарман бирҙе,
Атлы ла ғына яуға таралырға,
Һай кем, яй киткәнгә.

2

Айҡай ҙа ғына сайҡай, күкрәк киреп,
Һай кем, күкрәк киреп,
Таштар ваттыҡ мәсеткә тип, ай,
тауҙарҙа,
Һай кем, ай, тауҙарҙа.
Батша ла ғына беҙгә бүләк тине,
Һай кем, бүләк тине,
Батыр булғас Парижда һәм, ай, яуҙарҙа,
Һай кем, яуҙарҙа.

Ҡыуанды ла беҙҙең бөтә илкәй,
Һай кем, бөтә илкәй,
Ташбулаттан Каруанһарай эшләп бөткәс,
Һай кем, эшләп бөткәс,

Главный фасад и двор

Ғәскәриҙәр урынлашты, ай, был йортҡа,
Һай кем, ай, был йортҡа.
Кантондары йыйын ҡорҙо, бер йыл үткәс,
Һай кем, бер йыл үткәс.

Ялтырап та торған Каруанһарай,
Һай кем, Каруанһарай,
Мәсеттәре уртаһында муллаларға,
Һай кем, муллаларға.
Бер йыл үткәс, беҙ тупланғас был һарайға,
Һай кем, был һарайға,
Штатный тип фарман килде кантондарға,
Һай кем, кантондарға.

Янаралдар бер туҡтауһыҙ фарман бирә,
Һай кем, фарман бирә.
Ҡылыс, һөңгө һораусы юҡ, штат иткәс,
Һай кем, штат иткәс.
Ҡаһарман да кантон менән Ҡаһым түрә,
Һай кем, түрә,
Илде һөйләп, ҡылыс бирмәй, эштәр үткәс,
Һай кем, эштәр үткәс.

3

Айҡай ҙа ғына сайҡай, керҙәр йыуа,
Һай кем, керҙәр йыуғанда,
Талмаймы икән уның беләккәйҙәре,
Һай кем, сайҡағанда.
Күрше генә тороп, күрешә йөрөп,
Һай кем, күрешә йөрөгәндә,
Янмаймы икән уның йөрәккәйҙәре,
Һай кем, кис ятҡанда.
Яуҙа ғына йөрөп, һауҙар ҡайтһам,
Һай кем, һауҙар ҡайтһам,
Алам да ғына тинем, һүҙҙәр бирҙем,
Һай кем, ай, киткәндә.
Яуҙа ғына йөрөп, һауҙар ҡайтһам,
Һай кем, һауҙар ҡайтһам,
Ташлап та ғына киткән, һүҙен боҙған,
Һай кем, көн еткәндә.

Хәбибулла Ғәбитов

КАРУАНҺАРАЙҒА АРНАП

(Риза хәҙрәттең «Аҫар»ын уҡығандан һуң)

Аһ, ни хәтле шөкәтең[1] ҙур...
күккә ашҡан һәйбәтең[2],
Тарта йәнемде сихырлап ниндәйҙер ҡодсиятың[3].

Ниндәй йәшерен ҡеүәтең был бар тәнемде
ҡапланы,
Ниндәй ғали, серле мәғәнәң керле йәнемде
пакланы.

Күренә күҙгә ҡоббә[4] — михрабында[5] илһамдар
тулы,

---

[1] Шөкәт — дан, бөйөклөк.

[2] Һәйбәт — ҡурҡыу ҡатыш хөрмәтләү тойғоһо уята торған күренеш, мөһәбәтлек.

[3] Ҡодсият — дини. Изгелек, аллаға (изге, пак рухҡа) бәйләнешлек.

[4] Ҡоббә — көмбәҙ.

[5] Михраб — мәсеттең төшлөк (ҡибла) яғында мулла өсөн яһалған асыҡ бүлмә.

Был ғимарәт[6], был мөһарәт[7] бары әждадым[8]
ҡулы!

Шул бабайҙар балсығынды урға һалып тапаған,
Шул бабайҙар кирбесеңде арҡалауҙан ҡасмаған.

Ул иманлы, ғали йәндәр, аҙмы михнәтең күреп?
Һиндә түккән изге йәштәр, бер хоҙайға баш ороп.

Һиндә күрҙем... һиндә таптым милли ҡодес[9],
ғәнғәнә[10],
Һиҙенә йәнем: һиндә ҡәғбәм[11], наҙлы, сазлы
дәбдәбә[12].

Һөйләйһең... күрәм йыраҡтан иҫке тарих
ҡатлауын,
Беҙҙе тәҡдир был йыһанда ҡайҙа илтеп ташлауын.

Илай ташың... күк йөҙөндә нурлы «йондоҙ»
тапмаҒас...
Ҡодес идеал — шәм-сырағын береһе лә бер
яҡмаҒас...

---

[6] Ғимарәт — ҡоролма.
[7] Мөһарәт — оҫталыҡ, сәнғәт.
[8] Әждад — олатайҙар, бабайҙар.
[9] Ҡодес — изгелек.
[10] Ғәнғәнә — йола, борондан ҡалған ғәҙәт.
[11] Ҡәғбә — тотҡан юл, идея.
[12] Дәбдәбә — шатлыҡ, һөйөнөс.

Юҡ, күңел мәьйүс[13] түгел... тау-таш ватырлыҡ
бар өмөт...

Тик хәҙергә мин ҡафәстә[14] ятҡан арыҫлан кеүек...

Һүнмәһә «рух»... ул «ҡара көс»... ул «фәҡирлек»
ни итер!
Әрнемәйем... ҡарғамайым... күпкә бармаҫ,
тиҙ үтер!

1915

---

[13] Мәьйүс — өмөтһөҙ, киләсәккә ышанысһыҙ ҡараусы.
[14] Ҡафәс — ситлек.

Конец ознакомительного фрагмента

Уважаемый читатель!

Размещение полного текста данного произведения невозможно в связи с ограничениями по IV части ГК РФ.

Эту книгу Вы можете почитать в Оренбургской областной универсальной научной библиотеке им. Н.К. Крупской по адресу: г. Оренбург, ул. Советская, 20; тел. для справок: (3532) 77-92-66